Дәресте системалы анализлау тәртибе.

Билдәле педагог С.Соловейчик шулай ти: “Дәрес- йомаҡ. Уҡытыусы- йомаҡ ҡойоусы, ә дәрестә ҡатнашыусы кеше, кем генә булыуына ҡарамаҫтан, йомаҡ сисеүсе”

Мәғарифтың бөгөнгө төп маҡсаты- белемле, ирекле, зыялы, әхлаҡи һәм физик яҡтан сәләмәт, тормошта үҙ урынын дөрөҫ билдәләүгә, киләсәктә үҙен яҡлауға, үҫтереүгә һәм камиллаштырыуға һәләтле шәхес тәрбиәләү.

Педагогик процестың нигеҙен уҡыусы һәм уҡытыусы араһындағы мөнәсәбәт тәшкил итә. Баланың үҙенең ҡыҙыҡһыныуына, ихтыяжына, һәләтенә һәм мөмкинлектәренә тап килгән белем алыуға хоҡуғы булыуы билдәле. Ә бына уҡытыусы уҡыу-уҡытыу процесында мәғлүмәт сығанағынан бөгөн уҡыусының фекерләү һәләтен үҫтереүгә, уҡыу һәм танып-белеү эшмәкәрлеген ойоштороусыға, үҙ иленең ысын патриотын тәрбиәләүсегә әүерелде. Был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу иһә уҡытыусының үҙ шәхесенә тәнҡит күҙлегенән ҡарауын, яңылыҡҡа ынтылыуын, заман һулышын тойоп, белемен өҙлөкһеҙ камиллаштырыуын, уҡытыу-тәрбиә процесына ижади ҡарауын талап итә. Мәктәптәрҙә уҡытыу, тәрбиә биреүҙең төп формаһы булған дәрестәрҙең сифатын күтәреү, уныу уҡыусыларға тәьҫир көсөн арттырыу-көнүҙәк мәсьәләрҙеү береһе.

Дәрестең сифаты уҡытыусының методик оҫталығына бәйләнгән. Методик оҫталыҡ үҙ сиратында уҡытыусының үҙе уҡытҡан предметты, уның методикаһын ныҡлы үҙләштереүенән, эшендә ижади ҡуллана белеүенән, теге йәки был теманы үҙләштереүҙе оҫта ойоштороуҙан, дәресте дөрөҫ планлаштырыуҙан килә. Уҡытыусы үҙе үткәргән һәр дәресте ҡасан булмаһын, ҡайҙа булмаһын, кем алдында булмаһын, һәр ваҡыт яҡлай белергә тейеш. Докладымда һеҙгә дәресте дөрөҫ төҙөү системаһын һәм Ю.А.Конаржевский алымына таянып, үҙ дәресеңә ентекле анализ биреү методикаһын тәҡдим итәм.

Ю.А.Конаржевский әйтеүенсә, дәресте дөрөҫ планлаштырыу һәм оҫта атҡарып сығыу өсөн иңтәүҙә дәрестең өс бурысы билдәләнә. Улар түбәндәгеләр:1. Өйрәтеүсе;2. Тәрбиәләүсе;3. Үҫтереүсе.Үҫтереүсе бурыс үҙе бер нисә бүлеккә бүленә: -телмәр үҫтереү (һүҙлек байлығын арттырыу, телмәр функцияһының мәғәнә тәрәнлеген үҫтереү); - фекерләү ҡеүәһен үҫтереү (анализ яһарға өйрәтеү, сағыштырыу, дөйөмләштереү); -һиҙгерлекте үҫтереү (күҙ менән билдәләү, ориентир тота белеү һ.б.);- хәрәкәтте үҫтереү (физик күнегеүҙәр, экскурсиялар, походтар үткәреү).

Дәресте планлаштырыу дәрестең төрөн билдәләүҙән башлана. Дәрес берләштерелгән, яңы тема аңлатыу, ҡабатлау, нығытыу дәресе, белемде тикшереү һәм йомғаҡлау дәрестәренә бүленә.

Берләштерелгән дәрес төҙөлөшө буйынса түбәндәге этаптарҙан тора:

1. Ойоштороу мәле.
2. Өй эшен тикшереү.
3. Уҡыусыларҙың дөйөм белемен тикшереү.
4. Яңы тема үҙләштереүгә әҙерлек осоро .
5. Яңы тема аңлатыу.
6. Теманы үҙләштереүҙе тикшереү этабы
7. Теманы нығытыу
8. Дәресте йомғаҡлау, баһалау этабы.
9. Өй эше биреү, инструктаж үткәреү,

һәр этапта бер нисә дидактик момент булыуы мөмкин. Дидактик момент үҙе түбәндәге өлөштәргә бүленә:

1. Уҡыу материалының йөкмәткеһе, йәғни дәрес йөкмәткеһе.

2. Дидактик эш төрҙәре.
3. Уҡытыу методтары.
4. Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу формаһы
5. Уҡыусыларҙың яуаптарының сифаты.

6. Дәрестә ҡулланылған мөнәсәббәттәр.

7. Реаль һөҙөмтә.

ҺӘР ӨЛӨШКӘ АЙЫРЫМ ТУҠТАЛАЙЫҠ. ДӘРЕСТЕҢ ЙӨКМӘТКЕҺЕН УҠЫТЫУСЫ ҮҘЕ БИЛДӘЛӘЙ. БЫНДА УҠЫТЫУСЫНЫҢ КИҢ ЭРУДИЦИЯҺЫ, ФАНТАЗИЯҺЫ, ҮҘ ПРЕДМЕТЫН БЕЛЕҮЕ, ӨҪТӘЛМӘ МАТЕРИАЛДАР МЕНӘН ОҪТА ЭШ ИТЕҮЕ, ДӘРЕСЛЕКТӘ БИРЕЛГӘН МАТЕРИАЛДЫ УҢЫШЛЫ ҠУЛЛАНЫУЫ МОТЛАҠ.

.Уҡытыусыға дәрескә әҙерләнгәндә түбәндәге талаптарҙы күҙ уңынан ыскындырмау мөһим,

1. Теманы асыу өсөн иң кәрәкле мөһим мәғлүмәттәрҙе, факттарҙы, закондарҙы ғына файҙаланығыҙ.

2. Ғилми яҡтан ныҡлап тикшерелмәгән, аңлайышһыҙ материалдарҙы ҡулланыуҙан һаҡланығыҙ.

3. Дәрестең башынан аҙағынаса төп идея ҡыҙыл һыҙыҡ булып үтергә тейеш.

4. Дидактик эш төрҙәре телдән башҡарылған эштәргә (һорауҙарға яуап алыу, әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләү, китаптан уҡыу, ятлау, әңгәмә, диалог төҙөү һ.б.) һәм яҙма эштәргә (дәфтәрҙә күнегеүҙәр эшләү, таҡтала яҙыу, карточкалар менән эш, таблица төҙөү, схема тултырыу һ.б.) бүленә.

5. Уҡытыу методтары, йәғни уҡытыусының эш алымдары:

1. Аңлатыу-күрһәтеү методы (АК) үҙ эсенә түбәндәгеләрҙе ала:
а) һөйләү (лекция, аңлатма биреү, әңгәмә үткәреү);
б) уҡыу;в) күргәҙмә әсбаптар (схема, таблица, һүрәттәр);
г) техник саралар ҡулланыу.
2. Репродуктив метод йәғни аңлап ҡабул итеү методы (Р):
а) аралашыу (уҡытыусы-уҡыусы әңгәмәһе);
б) схемалар эшләү (уҡыусы эшләй, уҡытыусы аңлата);
в) тәжрибә үткәреү;г) таҡтала эшләү;

д) таблица буйынса эшләү

3. Проблемалы эшләү методы (П):а) проблемалы һорауға уҡыусыларҙан яуап эҙләтеү;б) күргәҙмә әсбаптар менән уҡыусының үҙ аллы эшләүе.

4. Өлөшләтә эҙләнеү методы:а) уҡытыусы күрһәткән өлгө нигеҙендә уҡыусының артабан үҙ аллы эшләүе;б) китап менән үҙ аллы эшләргә өйрәтеү.

5. Тикшереү методы (Т) - бирелгән темаға йәки һорауға уҡыусының үҙ аллы килеүе, өҫтәлмә материалдар аша яуап эҙләүе

.Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген ойоштороу формалары: индивидуаль эшләү һәм коллектив эш. Коллектив эш үҙе өс төргә: фронталь, парлап, төркөмдәрҙә эшкә бүленә.

Яуаптарҙың сифаты (ЯС)Уҡыусыларҙың дәрес барышында һорауҙарға биргән яуаптары яҡынса түбәндәгесә билдәләнә: тулы яуап (Т), дөрөҫ яуап (Д), ижади яуап (И), аңлы яуап (А), тулы булмаған яуап (Тб), ярҙам менән бирелгән яуап (Я), хата яуап.

Дәрестәге мөнәсәбәттәр (М): предмет-ара мөнәсәбәт; уҡытыусы-уҡыусы араһындағы мөнәсәбәт

(яғымлы, авторитар, эмоциялы).Реаль һөҙөмтә (Рһ) уҡыусыларҙың теманы ҡабул итеүенә һәм уҡытыусының дөрөҫ баһа биреүенә бүленә

Дәрескә үҙ анализ

Класҡа ҡыҫҡаса характеристика бирелә.

1. Программала теманың бирелеше аңлатыла.

2. Дәрестең өс бурысы әйтелә.

3. Дәрестең төрө билдәләнә.

4. Һәр дидактик моментҡа аңлатма бирелә.

5. Дәрес структураһы, уның өс бурыс менән бәйләнеше күрһәтелә.

6. Дәрестең эш төрҙәре һаналып, уларҙың үтәлешенә баһа бирелә.

7. Дәрес буйынса дөйөм һығымта яһала. Өс бурысҡа ирешеү кимәле баһалана.